БАШҠОРТ МЕДИЦИНА ПРОФИЛАКТИКАҺЫ ҮҘӘГЕ

РЕСПУБЛИКА ТИРЕ-ВЕНЕРОЛОГИЯ ДИСПАНСЕРЫ

# Аҡылды юғалтып йәшәү нимәләргә килтерә? Йәғни ләззәт тураһында ҡыҫҡаса

(Халыҡ өсөн иҫкәрмә ҡағыҙы)

Өфө

2005 йыл

СПИДтан һаҡланыуҙың берҙән бер сараһы – айныҡ баш менән йәшәү. Наркомандарҙы, мәҫәлән, әфьюн-наркотик ҡына түгел, СПИД вирусы ла харап итә. Был вирус уларға, күпселек осраҡта, уртаҡ ҡулланылған шприц аша йоға. Ул ғына ла түгел, иҫерек кеше һайланып тормай, уйламайынса еңел генә енси мөнәсәбәткә инә.

Иҫерткес-әфьюндәр ҙә бик яуыз үҙенсәлеккә эйә: улар тәьҫире аҫтында насар кеше лә һөйкөмлөрәк күренә. Араҡы эсеп, ҡосаҡлашып-үбешеп йөрөгән ирҙәрҙе күргәнегеҙ барҙыр, ә әфьюн ҡулланыусылар бөтөнләй аҡылдарын юғалта. Ләкин һылыу күренгәндәрҙең дә бөтәһе таҙа-сәләмәт түгел. Улар араһында наркомандар ҙа, алкоголиктар ҙа, вирус йөртөүселәр ҙә осрай. Тимәк, СПИДты, йәғни иммунодефицит вирусын йоҡтороу теләһә кем менән енси мөнәсәбәткә кереүҙән генә лә булырға мөмкин. Енси яҡынлыҡ булмаған осраҡта иһә бар кешенән дә ҡурҡып йөрөү кәрәкмәй, иммунодефицит вирусы һөйләшкәндә һәм әйберҙәр аша йоҡмай.

Әҙәмдәрҙе белеүе ҡыйын. Оҡшатҡан кешегә ышанғы килә-килеүен, әммә аҡылдан яҙғансы ғашиҡ булыуҙан һаҡланыу кәрәк. Уйлап еткермәйенсә енси мөнәсәбәткә ингәнсе, алдан бер-береңде белеп, никахлашыу дөрөҫ. Был ваҡиғаны ата-әсәләр, туғандар, ышаныслы дуҫтар белергә тейеш. Никах теркәү бүлектәре иһә яҙылышып енси мөнәсәбәткә инеү алдынан уйлау өсөн бер ни тиклем ваҡыт бирә. Быға көлөп ҡараусы йәштәр булыр, сөнки уларҙың байтағы бит енси яҡынлыҡтан һуң ғына өйләнешә. Шулай ҙа саф мөхәббәт менән ғаилә ҡороуға етмәй.

СПИД, сифилис һәм башҡа күп төрлө йоғошло ауырыуҙар өйләнешкәндән тыш енси мөнәсәбәттә булғанда күсеп йөрөй. Был ауырыуҙарҙы ситләтеү өсөн бер генә сексуаль партнер булһа һәйбәтерәк булыр ине. Үлем ҡурҡынысы булмаһа ла, кешеләрҙең бер өлөшө енси ауырыуҙар арҡаһында нәҫелен дауам итә алмаҫлыҡ көнгә төшә. Аллаһы Тәғәлә енси боҙоҡлоҡ кәрәкмәгәнлеген иҫкәртеп тора, ҡайһы бер гонаһлыларҙың шулай “нәҫел орлоғон” ҡорота.

Күңелде уйнаштан арындырыу һәм иҫерткес эсемлектәрҙән һаҡланыу кәрәген дини китаптар мең йылдар дауамында иҫкәртеп килә. Ләззәткә генә бирелеп тамаҡ туйҙырып булмай. Күңел асып йәшәргә яратҡан илдәр донья тарихында йыш ҡына юҡҡа сыға барған, ҡайһы ваҡыт былдай торомош фәлсәфәһе менән йәшәү ырыуҙарҙы тамырынан ҡороткан.

Ярай, ләззәт кенә кәрәк тип әйтелгәндә, күп кеше шәкәр-кәнфитһеҙ сәй эсергә лә ултырмай. Элекке кешеләр шәкәр булмағанда ла сәләмәт булып йәшәгән. Әлеге ваҡытта был тәмләткес, һеркә һәм тоҙ кеүек, консервант сифатында ҡулланыла. Шәкәр тыштан ҡарағанда ла химреактив матдә кеүек бит, ул төп аҙыҡ түгел. Тағын араҡыһыҙ ҙа йәшәп була, ләкин эсәләр. "Тәмәке сәләмәтлеккә ҡурҡыныс янай" тип хөкүмәт тарафынан билдәләп торалар, әммә тарталар. Төрлө әҙәм менән енси яҡынлыҡта булмайынса бушаныу ләззәтенән башҡа йәшәп булмай, тип әйтеүселәр бар. Шулай ҙа былдай фекерле кешеләр үлтерерлек сир ғазабына дусар булырға тейеш түгелдәр. СПИД-тан һаҡланыу өсөн ундайҙарға иң теүәл сара – презерватив ҡулланыу. Быны ла ҡуллана белмәгәндәр Дарвин асҡан тәбиғи һайланыштан төшөп ҡаласаҡтар, йәғни үлеп бөтәсәктәр. Тәбиғи булмаған яһалма рәхәтлектән Хоҙай үҙе һаҡлаһын! Хеҙмәт һәм хәләл аҙыҡ менән ләззәт-рәхәтлектәр тәбиғәттә тигеҙ кимәлдә булһа ғына кеше үҙен ысын бәхетле тип хис итә.

***Үҙебеҙҙе ни ҡәҙәре аҡыллы тип уйлаһаҡ та, быны беҙ ошолай яҡлауға һәм ялған ләззәттәрҙән һаҡланыуға үҫеп еткәс тә мохтаж. Шулай ҙа, Хоҙай кеше затына үҙ-үҙен һаҡларлыҡ ҡына аҡыл биргән. Аҙғынлыҡ сиренең таралыуын тәртиплелек, тыйнаҡлылыҡ һәм айныҡлыҡ менән генә туҡтатып була.***

Югары категориялы табиптар:
Хәйҙәр Марат Мансур улы,
Хәйҙәр Нәсимә Талип ҡыҙы

РИО ГУЗ БЦМП, з.224, т.1000 экз., 2005 г.